***Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА***

# Гәрәбә төҫөндәге ижад

*СССР халыҡтары әҙәбиәте. Был һүҙҙәр беҙгә яҡшы таныш. Ул осор милли әҙәбиәттә бик күп яңы исемдәрҙе асты, беҙ әле лә шул дәүер ҡәләмгирҙәренең әҫәрҙәрен кинәнеп уҡыйбыҙ. Элекке Советтар Союзы киңлегендә тағы ла ниндәй исемдәр балҡыр, быныһын алдан күҙаллау мөмкин түгел, ләкин совет осоро яҙыусыларының ҙур мираҫы һәр саҡ мәҙәни ихтыяжды үтәүсе булып ҡаласағына шик юҡ. Мәҙәни бәйләныш өсөн мөмкинлектәр асылды. Улай ғына ла түгел, идеологик ҡорал булараҡ, әҙәбиәт Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында рухи көс сығанағы ине һәм Еңеү яулауға баһалап бөткөһөҙ өлөш индерҙе, сөнки байтағының яҙған-һыҙғаны ғәмәленән айырылманы... Фронтовик-шағирҙар тигән исем дә юҡтан бар булманы. Яҙыусыларҙың совет идеологияһына тоғро ҡалыуы аңлашыла, сөнки күпселеге иң яҡшы, камил йәмғиәт төҙөйәсәктәренә ышанып йәшәне, ғүмерҙәрен шуның хаҡына ҡорбан итте. Һүҙ бөгөн ҡорбандар хаҡында түгел, ә халыҡтар бәйләнешен нығытыуға, оло мәҙәни бер бөтөнлөккә ынтылған, шул маҡсатҡа хеҙмәт иткән әҙиптәрҙең береһе тураһында булыр.*



*Саломея Нерис*

“Поэзияны ҡанатлы зат, тиҙәр. Ҡанатлы булһа ла, ул ерҙән йөрөй, илдән илгә, телдән телгә күсә”, — тип яҙа Башҡортостандың халыҡ шағиры, ә ғәмәлдә ғүмерлеккә совет яҙыусыһы булып ҡалған Мостай Кәрим 1968 йылда сыҡҡан “Литва шағирҙары” тигән китаптың баш һүҙендә. Өс тиҫтә литва шағирының шиғырҙарын башҡорт теленә Ғ.Әмири, С.Әлибай, Ә.Әхмәтҡужин ауҙарған. Йыйынтыҡтың донъя күреүе осраҡлы түгел. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында көнбайыш республикаларҙан Башҡортостанға күп халыҡ эвакуациялана, эшелон артынан эшелон килә... Ҡешеләрҙе генә түгел, тотош заводтарҙы күсерәләр бит. Урал һәм Волга буйында йәшәүселәр күскен халыҡҡа хәленән килгәнсә ярҙамлаша. Әйтергә кәрәк, уларҙың араһында ижад әһелдәре байтаҡ була. Украина һәм Литва яҙыусылары Башҡортостанда үҙҙәренең антифашистик эшмәкәрлеген дауам итә. Башҡортостанды Литва менән әлегә тиклем бәйләп тороусы шағирҙарҙың береһе — Социалистик Хеҙмәт Геройы, Сталин премияһы лауреаты, Литва халыҡ шағиры Саломея Нерис.

С.Нерис — үҙенең ҡыҫҡа ғына ғүмерендә бик емешле ижад итергә өлгөргән ҡәләм оҫтаһы. Илһөйәрлек рухы менән һуғарылған байтаҡ шиғырҙарын ҡырҙа яҙа, һуғыш йылдарында мәжбүри ситтә йәшәү ижадына яңы осҡон ғына өҫтәй.

Идеологик көрәш, синфилыҡ темаһы ҙур урынды алғанын иҫәптә тотһаҡ, һорау тыуа: СССР-ҙа ысын ирекле, хөр тормош төҙөләсәк, тигән инаныу ҡасан һәм нисек барлыҡҡа килгән һуң унда?

Литва халыҡ шағиры, беренсе дәрәжә Сталин премияһы лауреаты Саломея Нерис (ысын исем-фамилияһы — Саломея Бачинскайте-Бучене) 1904 йылдың 17 ноябрендә Литваның көньяҡ-көнбайышында урынлашҡан Мариямполь өйәҙе Вилкавишкис районы Ҡиршай утарында донъяға килә. Саломеяның тәүге шиғырҙары ун ете йәшендә баҫыла. Уның бик оялсан һәм баҙнатһыҙ булыуын телгә ала замандаштары, хатта шиғырҙарын баҫтырғанда ысын исемен йәшерер булған. Ул саҡтағы псевдонимдары — Liudyte и Juraite. Шиғриәтенә иғтибар итәләр, маҡтауҙар ишетелә. Был Саломеяға көс бирә. 1923 йылдан ул — Salomeja Neris. Нерис — йылға исеме. Ошо псевдоним аша оло шиғриәткә килә.

1924 йылда Вилкавишкис гимназияһын тамамлағас, Ҡаунас университетының теология һәм философия бүлегенә уҡырға инә. Унда литва әҙәбиәтен, немец телен, педагогика һәм психологияны өйрәнә. Ҡаунас университетында уҡып йөрөгәндә мөхәббәт, тәбиғәт, йәшлек темаһын үҙ эсенә алған "Иртә таң менән" тигән китабы нәшер ителә. Тәбиғәт һәм кеше темаһы Нерис ижадында үҙәк урында тора. Әйтеүҙәренсә, студент йылдарында бер өйләнгән профессор менән мөхәббәттәре була. Тик аҙаҡтан ғалим унан баш тарта. Был тетрәнеү ҡыҙҙың тормошонда яңы боролош алырға мәжбүр итә. Ул кеше, ғаилә бәхете түгел, кешелек бәхете тураһында нығыраҡ уйлана. Һәм ижады ошо йүнәлештә үҫешә башлай.

1928 йылда Саломея Лаздияй гимназияһында немец теленән уҡыта. Шул йылдарҙа Литва комсомолдарының подпольелағы ойошмаһы менән элемтә урынлаштыра. Өс йылдан Ҡаунаста педагогик эшмәкәрлеген дауам итә, нәшер ителәсәк литва халыҡ әкиәттәрен мөхәррирләй, йәғни бер ыңғайҙан (1931) Ҡоминтерн элемтәсеһе булып китә (псевдоним "Вирвичиа", лит. Virvycia), 1934—1936 йылдарҙа подпольелағы "Жямайтиёс тиеса" коммунистик гәзите менән бәйләнеш булдыра. 1931 йылда һул ҡарашлы, антифашистик, демократик йүнәлеш тотҡан "Өсөнсө фронт" («Трячас фронтас»; Ҡазис Борута, Антанас Венцлова һ.б.) журналы тирәһендә ойошҡан яҙыусыларға яҡынлаша. 1931—1934 йылдарҙа шиғырҙары коммунистик баҫмаларҙа донъя күрә.

Яҙыусы Антанас Венцлова — С.Нeристың замандашы һәм көрәштәше. "Йәшлекте эҙләгәндә" тигән хәтирәләрен ул олоғайғас, күп ҡорҙаштары был донъянан киткәс яҙа. Ҡитабында дуҫы Ҡазис Борута менән талантлы йәш шағирә Нeристы тәү тапҡыр Венала тап итеүҙәрен иҫкә төшөрә: "Өсөнсө фронт"тың дүртенсе һаны сыҡҡанда Берлиндан Ҡазистан хат алдым: "С.Нeристан көтмәгәндә хат килеп төштө, ул беҙҙе маҡтаған. Һин уның менән дуҫлашырға тырыш. Беҙгә нисек тә булһа, күберәк халыҡты үҙебеҙҙең яҡҡа ауҙарырға кәрәк", — тип яҙған". 1931 йылдың 22 февралендә Нерис яҙғандарҙан тағы бер өҙөк ебәрә: "Өсөнсө фронт"тың һәр һанын башынан аҙағына тиклем уҡыйым. Үҙ ғүмеремдә бер журналды ла улай онотолоп уҡығаным юҡ ине. Дүртенсе һандың баш һүҙендә шундай юлдар: "...беҙҙең һәр һүҙебеҙ тулҡынландырһын, хәүефләндерһен, асыуландырһын, ярһытһын, ҡыуандырһын, туплаһын..." Былар яңы һүҙ, һәм ул маҡсатына өлгәшә. Журналдың мещан фанатиктарҙы енләндереүе, асыуландырыуы ғәжәп түгел. Миңә был тере, энергиялы һүҙ оҡшай — ул яҙҙың ирекле еле. Ул миңә бик үҙенсәлекле тәьҫир итә: яраға һибелгән көслө дарыу һымаҡ. Мин дә бит шундай уйҙар эсендә йәшәйем һәм бөтөн күңелем менән һеҙҙе хуплайым. Шул йәнһеҙ, күгәреп ҡатҡан мещандарҙы күптән инде яратмайым. Ләкин мин

үҫкән мөхит — һаҙлыҡ, унан еңел генә ҡотолоп булмай. Ярай, быныңнасарлығы юҡ, еңеү һәм тулы азатлыҡ буласаҡ” (Неристың хатынан өҙөк).

Аҙ һанлы Балтик буйы халыҡтарына ла үҙҙәренән күберәк булған халыҡтар, ҙурыраҡ дәүләттәргә ҡаршы көрәшеп йәшәргә тура килгән. XII—XIII быуаттарҙа немец помещиктары иҙеүе аҫтында көн күрәләр, барондарҙың башбаштаҡлығынан ыҙа сигәләр. Германлаштырыуға хәлдәренән килгәнсә ҡаршы торалар. Литва әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы Кристионас Донелайтистың тиңлек, азатлыҡ идеяһы, иҙеүсе синыфты юҡ итергә саҡырған яҙмалары Саломеяның йөрәгенә үтеп ингәндер, халыҡ ихтыяжын кәүҙәләндергән ижадын үҙ иткәндер. Шағирға ул шундай юлдарҙы арнай:

> Баһадир булып баҫтың һин, Донелайтис,
> Һәм ярлыны түрәләрҙән яҡланың.
> “Туған телебеҙҙең ҡөҙрәте менән
> Дошманға ташланығыҙ!” — тип өйрәттең.

“Ул үҙенең шәхси яҙмышы тураһында ғына түгел, ә ватаны һәм тотош донъя тураһында ҡайғыртыусы, уйланыусан ҡатын ине”, — тип билдәләй Литва халыҡ шағиры, сәйәсмән, йәмәғәт эшмәкәре А.Венцлова үҙенең “Йәшлекте эҙләгәндә“ хәтирәләрендә.

Совет осорондағы иң билдәле ижад әһелдәренең береһе — Литва халыҡ шағиры, Ленин исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Эдуардас Межелайтисты Саломея Нерис Каунас гимназияһында әҙәбиәттән уҡыта. “Саломея Бачинскайте абруйлы уҡытыусы ине”, — тип хәтерләй яҙыусы. Бөтөн шиғырҙарҙы яттан белгән уҡытыусыны барыһы ла ярата, хөрмәт итә. Ә ул, ысынлап та, яҡшы хәтере менән аптыратыр булған. Ни өсөн тигәндә, литва, немец, француз, инглиз телдәрендә С.Нерисҡа еткереп шиғыр һөйләүсе булмаған. Литва рәссамдары һәм шағирҙары, халыҡ йырҙары — дайналар тураһында бик мәғлүмәтле була. “Саломея Нерис — иң нескә эске тойғоно сағылдыра алыусы шағир. Ҡай саҡ кәйефтең бер мәле, һүҙҙе биҙәрлек саҡ ҡына йылмайыу ҙа һүҙҙең үҙенә ҡарағанда ҙурыраҡ тәьҫир итә. Неристың шиғырҙары шағирҙарыбыҙ араһында иң ауыр тәржемәләнә, тип иҫәпләүҙәре, бәлки, шуның менән бәйлелер? Шиғриәте гүзәллеген икенсе телдә нисек аңлатырға? Бының сере шиғри юлдары араһына йәшерелгән...”, — тип яҙа Э.Межелайтис.

1935 йылда С.Неристың “Йоҡа боҙ буйлап” тигән йыйынтығы нәшерләнә. Хәҙер уның лирикаһында яҡшыраҡ, яҡтыраҡ тормошҡа ынтылыу мотивы баҙыҡлана бара. Ҡатындың үҙенә һәм кешеләргә бәхет яулар өсөн йоҡаҡ боҙ буйлап йүгереүе ошолай тасуирлана:

> Көҙ. Бысраҡ. Ҡуйы томан.
> Бында төн хөкөм һөрә.
> Торналарҙың ҙур тубы
> Болоттарҙы саҡ йыра.
> Ирек ораны сыңлай:
> “Осабыҙ диңгеҙ аша!”
> Уны ишетә бер ярлы
> Хөрлөккә һыуһағанға.
> Оса ҡоштар, болоттар,
> Оса минең уйҙарым.
>
> Ерҙәге фәҡирлекте
> Юҡ итерлек көс бармы?
> Бирегеҙ ҡанат миңә,
> Киңлеккә атылырға.
> Һөрөмдәрҙе таратып,
> Ҡояш йөҙөн асырға.
> Белмәмеш булдым быға са,
> Ә бит төн үтергә тейеш.
> Батырлыҡ ҡылып, халыҡҡа
> Мин ярҙам итергә тейеш.

*(1935)*

1936 йылда архитектор, скульптор Бернардас Бучасҡа кейәүгә сыҡҡас, бер йыл самаһы Парижда йәшәйҙәр. Тап шул йылдарҙа Нерис Литва, Польша компартиялары етәкселәре менән Коминтерндың элемтәсеһе була ла инде.

“Ошо көндән алып, мин хеҙмәтсән халыҡты иҙеүселәргә ҡаршы аңлы рәүештә ҡаршы сығам, һәм поэзиям халыҡтың көрәш ҡоралы булһын, уның ихтыярын, маҡсатын сағылдырһын өсөн, үҙемдең эшемде массаның эшмәкәрлеге менән берләштерергә тырышам,” — тип яҙа ул “Өсөнсө фронт” журналында. Был ҡыйыу фекер. Бөгөн ниндәй яҙыусы үҙ бурысы һәм маҡсаты тураһында шулай ярып әйтә алыр ине икән?

Неристың социаль ғәҙелһеҙлеккә кире мөнәсәбәте “Демядис булып сәскә атам” (1938) китабында асыҡ сағыла. Ул антифашист дуҫтары менән Испанияла барған ваҡиғалар тураһында фекер алыша һәм интернациональ фронттың берҙәмлегенә арналған “Героика” шиғырын яҙа. Был осорҙағы шиғырҙарында революцион рух көсәйә, лирик кисерештәр артҡараҡ күсә, ләкин ошо тышҡы ҡатылыҡ, ҡәтғилек эсендә кешеләргә булған йылы мөнәсәбәте үҙгәрмәй.

1940 йылдың июлендә СССР Верховный Советына Литваны Советтар Союзы составына ҡабул итеүҙәрен һораған юллама барып етә. СССР Юғары Советына мөрәжәғәт итеүсе Делегация составында яҙыусылар Юстас Палецкис, Людас Гира һәм Пятрас Цвирка менән бергә Саломея Неристың да исеме бар. Шул йылдың август айында Литва ССР-ы төҙөлә. Иптәштәре менән бергә Саломея ла Мәскәүгә килә...

Делегация поезда Мәскәүгә барған саҡта күп кешеләр менән осраша, Совет илендәге азат тормош менән ҡыҙыҡһыналар. А.Венцлованың китабында был турала ентекләп яҙыла. Улар юлындағы кешеләр осраҡлымы, әллә, ысынлап та, яҡшы тормош кисергәндәр генә тура килгәнме, хәҙер тәғәйен белеү мөмкин түгел.

Мәҫәлән, поезд проводнигы шулай тип һөйләй: “Заман үҙгәрҙе. Беҙ уҡыйбыҙ. Бер улым инженерлыҡҡа уҡый. Бөтөн йәштәр ҙә уҡый. Уҡыу өсөн түләргә кәрәкмәй. Хөкүмәт, етмәһә, стипендия бирә. Минең ике улым да стипендия ала. Күпме теләйһең, шул тиклем уҡы — ил ҙур, төрлө һөнәр эйәләре кәрәк. СССР-ҙа бөтөн ерҙәр тиерлек — колхоз милке”. Бындай шыма, маҡтап, маҡтанып һөйләүҙәр күп, шуға ла Литвала социализм төҙөү тураһында хыялланыусылар Советтар Союзын идеаль йәмғиәт итеп күҙ алдына килтергәндәр, тигән уй тыуа.

Революция ҡаҙаныштарын ихлас ҡабул иткән шағирә Мавзолейҙа, Ҡыҙыл Майҙанда була, совет кешеләре менән осраша — былар барыһы ла уның күңелендә ҡабатланмаҫ тәьҫорат ҡалдыра, Ленинға арналған “Большевик юлы” поэмаһында сағылыш таба.

Сәйәси ваҡиғалар эсендә ҡайнап йәшәһә лә, С.Нерис ижадты онотмай, киреһенсә, ул үткәнгә ныҡыраҡ мөрәжәғәт итә, шуның һөҙөмтәһендә 1940 йылда халыҡ ижадына нигеҙләнгән һәм бөгөн дә әһәмиәтен юғалтмаған “Эгле — туҙбаш йыландар королеваһы” поэмаһы баҫыла. Был йыл, ғөмүмән, уның өсөн емешле осор. Сәйәси эшмәкәр булараҡ, Нерисы Литва Республикаһы Халыҡ Сеймының тулы хоҡуҡлы комиссияһы ағзаһы итеп һайлайҙар. 1941 йылда — ул СССР Юғары Советы депутаты. Съезд трибунаһынан “Сталин тураһында поэма”һын уҡый.

Халыҡтар диңгеҙе — СССР-ға ҡушыл,
Яңы моң ҡылы булып сыңла!
Уларҙың ҡеүәтле һәм татыу хорында,
Яҡты Литвам, минең илем! —

тип яҙа ул яҡты киләсәккә ышанып.



*“Эгле — туҙбаш йыландар королеваһы” скульптураһы.*
*Литва, Паланга ҡалаһы*

А.Венцлова мәғариф халыҡ комиссары итеп тәғәйенләнгән көндәрҙең береһендә Саломея уның янында булып китә.

— Мин шул тиклем шатмын... шул тиклем шатмын, яңы тормош башлана. Һәм һин дә бында... — тип ҡаршы ала уны А.Венцлова, сөнки ул С.Неристы шәп уҡытыусы булараҡ та белә. Нерис көтмәгәнсә яуап бирә. Ул хәҙер үҙен тотошлайы менән ижадҡа арнаясағын әйтә, шуға ла уҡытыусылыҡ эшенән азат итеүҙе һорай.

“Оҙатҡан саҡта Нерис һораны:

— Һуғыш... мин ул турала йыш уйлайым... — Уның тауышында ҡурҡыу бар ине, — Һуғыштың ҡанаты беҙгә ҡағылып ҡуймаҫмы һуң?”

Ҡанатланып ижади эшкә сумған мәлендә Нерисҡа ҡайғылы хәбәр килеп ишетелә — Литваға немецтар инә башлай. “Лайсвес” хәрәкәте (“Урман туғандары”) Саломеяға үлем язаһы ҡарары сығара. Саломея, өс йәшлек улын алып, республиканан сығып китергә мәжбүр була. Ул саҡта Литванан ике меңләгән кеше эвакуациялана.

Бынан ары С.Нерис иң көслө ҡорал итеп алған ҡәләмен ҡулынан төшөрмәй. Беҙ уны Литва совет әҙәбиәтен үҫтереү өсөн күп көс һалған шәхестәрҙең береһе тип беләбеҙ. Үткер шиғырҙары Литва өсөн иң ауыр мәлдәрҙә яңғырай. Фашист режимы көсәйә, антифашистар һәм коммунистар төрмәләргә, үлем ҡосағына ташлана. Был ҡыйыу кешеләргә арнап, Саломея “Төрмәлә яҙ” шиғырын һәм “Дүртәү” поэмаһының айырым өҙөктәрен яҙа. Унда дүрт комсомолдың фашистик Литвала ҡулға алыныуы һәм атылыуы һүрәтләнә. Атырға алып китеп барған конвоирҙарҙың ҡаты ҡамауында булыуға ҡарамаҫтан, комсомолдар дошмандан көслөрәк:

Үҫәләр һәм йәлләдтәр өҫтөнә баҫалар,
Йондоҙҙарға тейә баштары...

Эвакуацияланған Литва зыялылары башлыса Пензала йәшәйҙәр. Гоголь урамының 40-сы һанлы йортонда Литва Хөкүмәте урынлаша. 1941 йылдың июлендә "Онотолмаҫ көндәр" тип аталған мемуарҙарында Нерис шулай яҙа: "Ярһыҙ Сура йылғаһы һәм Пенза урамдарының йәшел сағандары, Лермонтовтың ҡара бюсты ҡуйылған тыныс мөйөш һәм күпереп үҫкән баҡсаһы, сағандарҙың, ҡарамаларҙың көҙгө сәскәһе менән биҙәлгән парк аша күҙҙәр алыҫҡа, көнбайышҡа, дошман баҫып алған ватан яғына уҡтала.

Беҙҙе, Литва яҙыусыларын, аҙға ялға туҡтаған торналар тубын ҡаршылаған кеүек ҡаршы алдылар. Лермонтов китапханаһы ҡунаҡсыл ине, ҡала мөхите ижад өсөн ыңғай булды".

Ауыр йылдарҙа халыҡтарҙың берлеге, терәк булыуы ҙур көс биргәндер: "Пензала йәшәлгән дүрт ай — бөтәһе лә тыныс элегия, ирен гармунының бер тонлы ябай музыкаһы һәм таш түшәлгән Ҡарл Маркс урамынан ҡара иртәләрҙә фронтҡа китеүсе отрядтарҙың тигеҙ аҙымы һымаҡ яңғырай һәм минең дә йөрәгем улар менән ҡуша көнбайышҡа талпына ине..."

Литвалағы фажиғәле хәлдәр ишетелеп тора. Мәҫәлән, Палангалағы пионер лагерына немец караптары ут асып, унда күп бала һәләк булыуын бик ауыр кисерә ижадсы. Иҫән ҡалған бала-сағаны совет һалдаттары Волга буйына, ауылдарға күсерешәләр. Бындағы балалар йортонда литва балалары һуғышты онота алмай, төшөргән һүрәттәрендә снарядтар шартлай, самолеттар бомба ташлай, үлгән кешеләр... Шулай ҙа күбәләктәргә һәм ҡоштарға урын табыла. Матурлыҡ, тормош тураһындағы хыял бала күңелендә барыбер юҡҡа сыҡмай. Былар бөтәһе лә Нерисҡа ныҡ тәьҫир итә һәм ул "Әсәй, һин ҡайҙа?" поэмаһын яҙа. Ул башта "Фашист баҫҡынсыларына ғәйепләү акты" тигән брошюра рәүешендә сығырға тейеш була. Ләкин Нерис ғәйепләү актын шиғри юлдар аша бирә:

Балалар ҡанын тулҡын йыуа,
Туймаҫ ҡом йота.
Һәм йән ҡыйыусылар унда
Ҡара тояҡтарын йыуа...

С.Нерис 1942 йылды Пензала ҡышлай, артабан Өфөгә юллана. "Тормошто данла, йөрәк!" һәм урыҫ телендәге "Сквозь посвист пуль" (1943) тигән китаптары шул осорҙа баҫыла. Был ваҡыттарҙа уға фронтҡа барып, Литва частары алдында ла йыш ҡына сығыш яһарға тура килә. С.Нерис — I дәрәжә Ватан һуғышы ордены кавалеры.

Саломея Нерис менән бергә яҙыусылар Антанас Венцлова, Людас Гира ла Пензала эвакуацияла була. Л.Гираның шундай шиғыры бар:

### Иҫә елдәр Урал яғынан

Тыуған ерҙең аҡ сағаны
Иңрәй һағыштан.
Йырҙар аға, күҙ йәшеләй,
Алыҫ-алыҫта.
Күктә йөҙә күк болоттар,
Ҡояшты ҡаплап.

Ерҙә үтә, үтә полктар,
Ғәйрәтле атлап.
Иҫә елдәр, ҡар һепереп,
Урал яғынан.
Килде үс алыр замандар;
Нәфрәт ағыла.

Яңғырай йырҙар, ярһыу йырҙар —
Ашыҡ, дуҫ, ҡалма!
Оҙата беҙҙе баҫыуҙар,
Ҡайындар ҡалмай.
Ысыҡтар йәш булып тама,
Урмандар шаулай.
Алыҫ түгел Смоленск,
Хәтфәле юлдар.
Литва сағандары көтә,
Күр, болғай ҡулдар.
Минск аша ла үтербеҙ —
Аҙымдар батыр.
Тыуған ерҙең төтөн еҫе
Һағыш уятыр.
Беҙ белербеҙ яулап алған
Еңеү ҡәҙерен.
Сәскәләр менән күмербеҙ
Һалдат ҡәберен.
Ҡауышҡанда торор беҙҙең
Ҡосаҡтар тулып.
Беҙ ҡайтырбыҙ, Литва, һиңә
Еңеүсе булып.

(1943)

Алда телгә алынған “Әсәй, һин ҡайҙа?” поэмаһын, шулай уҡ “Ялан”, “Мин һинән көнләшәм”, “Ҡайҙа ҡала?”, “Жандармдар уҡытыусыны алып киттеләр”, “Өмөт”, “Хат” шиғырҙарын Нерис Өфөлә яҙа. Улар халҡына барып етә.

Буш ваҡыттарында А.Пушкиндың, И.Тургеневтың, М.Горькийҙың, С.Маршактың, А.Ахматованың яҙмаларын туған теленә тәржемә итә.

Социалистик Хеҙмәт Геройы, сәйәсмән, яҙыусы Юстас Палецкис шулай тип хәтерләй: “Уның йырлап торған лирик шиғырҙары халыҡ күңелен, уның асылын сағылдыра. “Бер заман, яҙ көнө толпарыңда ҡыйыу сабып килерһең, тик мине инде тапмаҫһың...” Ябай ғына һүҙҙәр, ә ҡалай йырлап тора”.

А.Ахматова уның шиғриәтен яратты, уларҙың ижади яҡынлығын тоймау мөмкин түгел:

“...Мин Саломеяны тәү тапҡыр студент йылдарында күрҙем, ә талантлы шағирә, тип электән ишеткәнем бар ине. Һуңынан Миколайтис-Путинас (Литва халыҡ яҙыусыһы) ойошторған төрлө кисәләрҙә бергә лә булдыҡ. Ул ныҡ оялсан ине, бер ҡасан да бейегәне булманы, тыныс ҡына бер мөйөштә ултыра, ҡай саҡ шиғырҙарын уҡый. Бына шул ҡыҙҙың бер заман, 33-сө йылда, революцион телмәре яңғырай: “Сәнғәт хеҙмәтсән халыҡҡа хеҙмәт итергә тейеш, шунда ғына ул мәғәнәгә эйә!” Шуның өсөн дә Нерис үҙ ижадын пролетариатыҡы, тип атай. 40-сы йылда Халыҡ Сеймының тулы хоҡуҡлы комиссияһы ағзаһы булып китеүе лә бик нигеҙле. Беҙ Мәскәүгә әле генә Совет Социалистик Республикаһы тип иғлан ителгән Литваны Советтар Союзына ҡабул итеү тураһында Халыҡ Сеймы документын алып барғанда С. Нерис та беҙҙең арала ине. Бына беҙ Мәскәү Кремль һарайы баҫҡыстары буйлап күтәреләбеҙ, Саломея: “Был күтәрелеү — экиәт, символ, беҙ яңы, яҡты тормошҡа табан күтәреләбеҙ”, — тине. Кремль һарайында ул азатлыҡҡа сығыу тураһындағы ҙур поэмаһын уҡыны, ул бик көслө яңғыраны. Беҙҙең дуҫлыҡ ул үлгәнсегә тиклем һаҡланды. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында улым һәләк булды, уны Мәскәүҙә ерләнек. Ерләгән саҡта С. Нерис уға арналған “Иламағыҙ минең өсөн, ҡәҙерлеләрем” тигән шиғыр уҡыны. Бер йылдан үҙе лә вафат булды...”

1945 йылда әҙибәнең “Һандуғас һайрамай булдыра алмай” тигән китабы сыға. Вафатынан һуң, 1946 йылда “Минең Тыуған яғым” китабы урыҫ телендә баҫыла һәм I дәрәжә Сталин премияһына лайыҡ була (1947).

1940 йылда “Ҡыҙыл Башҡортостан” һәм “Коммуна” гәзиттәрендә Неристың ижадына арналған мәҡәләләр баҫыла. Эйе, 1943 йылда СССР Верховный Советы сессияһына киткәнгә тиклем ул Өфөлә йәшәй. Йыш ҡына Литва уҡсылар дивизияһында булып, шиғырҙар уҡыуы, фронт гәзиттәре менән хеҙмәттәшлек

итеүе, төндәрен Коминтерн радиостанцияһында сығыштар яһауы сәләмәтлеген ҡаҡшатҡандыр ҙа. Неристың шиғырҙары үҙ халҡына ышаныс менән тулы. Һуғышсылар исеменән туған халҡына, Литваға мөрәжәғәт итә. К. Симоновҡа эйәреп яҙған “Мине көт” шиғырының Литва һалдаттарына тәьҫир итеү көсө ҙур булғандыр.

“Әле дәһшәтле һуғыш йылының буранлы ҡышында беҙҙең яҡтарға “Литва һандуғасы” — шағирә Саломея Нерис килеп сыҡты. Ул ҡар баҫҡан һалҡын Өфөлә йылы ҡараш, йылы төйәк тапты; үҙенең дәртле һәм хәсрәтле, ялҡынлы һәм нәфрәтле йырҙарын ул беҙҙең ҡалала дауам итте, алыҫ аралар, ут-ялҡындар аша үҙ халҡы менән һөйләште. Литва поэзияһының беренсе илсеһе булды ул. Унан һуң шағирә Валерия Вальсюненен беҙгә ҡунаҡ булып килгәйне; шунан һуң ул беҙҙең яҡын дуҫыбыҙға әйләнде...” Халыҡ шағиры Мостай Кәрим С.Нерис тураһында бына шундай йылы һүҙҙәр яҙып ҡалдыра.

С.Нерис Башҡортостанда ҡайһы яҙыусылар менән аралашҡан, бында ниндәй уй-фекерҙәре тыуған — был турала мәғлүмәт юҡ тиерлек. Уны күргән, хатта ки бер өҫтәл артында ултырған яҙыусыларыбыҙ булғандыр, тибеҙ, тик уларҙың хәтирәләре беҙгә килеп етмәгән. Шунығы, Башҡортостанда саҡта талантлы шағирә байтаҡ ижад итергә өлгөрә.

1968 йылдың майында яҙыусы Пятрас Ҡейдошюс Башҡортостан яҙыусыларының VI съезында сығыш яһай: “Литва халҡы Башҡортостандың Саломея Неристы ҡара һуғыш йылдарында үҙ ҡосағына алып, уға ниндәй изгелек ҡылғанын яҡшы белә, бының өсөн Литва һеҙгә сикһеҙ рәхмәтле, Хөрмәтле яҙыусылар, һеҙҙең йөҙөгөҙҙә бөгөн ул бөтөн башҡорт халҡын күрә. Саломея өсөн һеҙгә баш эйәбеҙ!”

Үткән быуаттағы ҙур әҙәби бәйләнештәрҙе кәүҙәләндереүсе Саломея Неристың ижады бөгөн дә үҙенең ялҡынлы хис-тойғоло, ихлас шиғриәте изгелеккә һәм ғәҙеллеккә булған ышанысы менән үҙенә арбай. “Йоҡа боҙ буйлап” шиғырында ниндәй көслө метафора. Тәнҡитселәр Саломеяны юҡҡа “Литва Ахматоваһы” тип атамағандарҙыр.

Ер яҙ менән йәрәште шатланып,
Ә мин һуң дуҫ ҡайҙан табырмын?
Ерҙең туйына ашығып йүгерәм,
Көҙгөләй йоҡа боҙ өҫтөнән.
Ер сәсен биҙәр һалҡын умырзая,
Әҙәмдең шат ауазы.
Һин дә тиҙ түл йыйырһың, изге,
Сафтарҙың иң сафы — Ер-әсә.

Литва поэзияһының Башҡортостандағы беренсе илсеһе мәҙәни-әҙәби тормошта үҙ эҙен ҡалдырҙы. 1968 йылда Башҡортостан китап нәшриәтендә баҫылған “Литва шағирҙары” китабы шуның һөҙөмтәһе була. Утыҙға яҡын литва шағирының шиғырҙары башҡорт телендә донъя күреүе әҙәбиәткә мөнәсәбәтте сағылдыра. Был бөгөн дә бик һирәк була торған хәл. Ҡасан йәнләнер ошондай ҙур күләмдәге әҙәби бәйләнеш, аралашыу — әйтеүе ҡыйын.

Пенза ғалимдарының һуғыш йылдарына арналған тикшеренеүҙәре аҙ түгел. Уларҙың байтағы Литванан эвакуацияланған зыялылар тормошона арналған. Пензаның Карл Маркс урамындағы 1941—1942 йылдарҙа Саломея Нерис торған өйгә мәрмәр таҡтаташ ҡуйылған. Шанлы йылдар хәтирәләрен һаҡларға тырышыуҙары хуп күренеш.

1980 йылда Мостай Кәримдең һәм Әхиәр Хәкимдең ҙур тырышлығы менән Өфөлә “Башкирия” ҡунаҡханаһында Литва халыҡ шағиры С. Нерис иҫтәлегенә мәрмәр таҡтаташ асыла. Тик уның артабанғы яҙмышы шулай уҡ билдәһеҙ. Таҡтаташ тергеҙелһә, бәлки, уны Коминтерн вәкилдәре һуғыш йылдарында эшләгән бинаға (хәҙер авиация техникумы корпусы) йәки радиостанция урынлашҡан Главпочтамт бинаһына ҡуйыу яҡшыраҡ булыр.

С.Нерис 1945 йылдың апрелендә фашистарҙан азат ватанына яңы уй-хыялдар менән ҡанатланып, ҡыуанып ҡайтып китә. Ләкин Литвала яңы — эске һуғыш башлана. Ике айҙан Саломея ҡапыл вафат була. Йәшләй донъя ҡуйһа ла, бик ҙур мираҫ ҡалдыра ижадсы. Ул мираҫ әле лә әһәмиәтен юғалтмаған, сөнки Саломеяның яҙғандары башлыса кеше күңеле һәм бәхет төшөнсәһе менән бәйле, былар һәр әҙәмгә лә таныш. Йылдар һынауын үткән, хәҙер ысын гәрәбәгә әйләнгән шул шиғри юлдарға килер быуындар ҙа күҙ һаласағына мин шикләнмәйем. Саломея Неристы замандаштары “Литва һандуғасы” тип атай. Бөгөнгө көндә уның шикелле көнбайыштан көнсығышҡа моң тараткан ҡайһы Литва шағиры бар икән? Саломеяның моңо алыҫ тарафтарға барып ишетелә, уның яҙғандарын үҙенекеләй яҡын ҡабул итә халыҡтар. Шул гәрәбәләрҙең ҡайһыларын һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итмәксебеҙ.

## Шишмә янында

Тюльпанды кесерткән менән бутаны
Кем ҡулы, кем ҡулы?
Һәм ҡайын талға ҡушылып үрелгән,
Уратып йылғаны.

Ел тымған. Һәм алмағастар ишетә.
Шыбырлама, бер үк!
Бер өн юҡ. Йондоҙҙар менән тын ала
Йылымыс төнгө күк.

## Ватанһыҙ

Ватанһыҙ һәм әсәйһеҙ,
Өмөтһөҙ киләсәгең...
Беләм, быларһыҙ мотлаҡ
Һин бында килмешәкһең.
Күл төбөндә ятҡан
Һалҡын таш буласаҡһың.
Тау гөлө булһаң да, тик
Упҡынға тиңләшәһең.
Уны берәү ҙә күрмәй,
Берәү ҙә гөлдө белмәй —

Яндырырға тип бары
Усал йыландар шыжлай.
Бер мәл һин оноторһоң
Йылғалағы кәмәне,
Яҙҙы күрмәй һулырһың
Ҡулында сит-яттарҙың.
Ватанһыҙ һәм әсәйһеҙ
Уттар йотоп йәшәйһең.
Ҡайҙа һуң әхирәттәрең,
Әйт, төнгө күбәләгем?

## Мине көт

Неман боҙо иреп ағыр,
Гөл тулыр баҡсаңда.
Көт һин мине, ҡәҙерлем,
Алмағас янында.
Ҡом буйлап яланаяҡ
Йәй үтер йүгереп.
Төнгө нур эсендә ысыҡ

Емелдәр йәш булып.
Көҙ етер. Килер һыуыҡ мәл.
Сәскәләр һулыр.
Алмағас янында көт мине
Буранға ҡарамай.
Тәҙрәгә дауыл һүрәт эшләр,
Биҙәкләр ап-аҡтан.

Сәнскәкле ҡышта ла мине
Көтөүҙән туҡтама.
Әгәр ҙә яратһаң мине,
Ышанһаң миңә,
Еүеш окоп — тыуған ерҙәй, —
Ул йылы миңә..
Сөнки һине эргәмдә тоям.
Беләм, ысынлап шулай.
Шул саҡ әжәл дә урап үтә
Бер пуля ла алмай.
Балдағыңды сисә күрмә,
Ҡырҡма толомоңдо!
Бары мине генә көт,
Бел мотлаҡ ҡайтырымды.
Әләмде түбән төшөрөрҙәр,
Ул юҡ, тиерҙәр.
Тик ышанма. Мин ҡайтасаҡмын,
Көтә генә күр.
Хатта таштар ауаз бирһен,
Таяҡ сәскә атһын.
Мине берәү көтмәгәндә лә
Көтәсәкһең һин.

## Диңгеҙ, диңгеҙ

Диңгеҙ фирүзә төҫөндәге
Тулҡындарын бәүелтә.
Аҡсарлаҡ ҡамасау түгел,
Бында хыял итергә.

Тулҡын ел менән бейей,
Мине аяғымдан үбә.
Диңгеҙ тулҡынды иларға,
Йыр-бейеүгә өйрәтә.
Минең менән дә ул шаяра,
Сикһеҙлеге эсендә
Һөйә, һыйпай, сайпылта.

Алыҫ йылдар иҫкә төшөп,
Йөрәк дарҫланы шул саҡта.
Тик минең янымда хәҙер
Бары ел, һыу, болот ҡына...
Ҡояшта янған йөҙөм
Шундай матур ине
Ул саҡта толомдарымды диңгеҙ еле
таранды.
Мин һағынған аҡсарлаҡ
Хәҙер ҡайҙа оса икән?
Ә ҡом ниндәй серҙәр һаҡлай?
Диңгеҙ, мин һине яратам!

## Ни өсөн өндәшмәй?

Көнөн дә, төнөн дә бер ауаз сығармай,
Зинһар, әйт, ни өсөн Ер шып-шым, өндәшмәй?
Уттар менән язаланған саҡтарында
Ерем һыҙланмаймы икән әллә, әсәй?

Эйе, Ер тәгәрәй мәңгелек юлынан.
Һүҙһеҙ. Һыҡтамай, әйтмәй үпкә һүҙен дә.
Ә ул бит әҙәм ҡанын эсеүҙән ҡурҡа,
Бәхетле, мең төрлө сәскәгә төрөнһә.

Ер эсенә ҡайтҡандар тымған мәңгегә,
Берәһе лә инде кире килмәйәсәк.
Улар хәҙер — елдәр таратыр ҡом бөрсөгө,
Йә ҡыуаҡ аҫтында үҫкән ҡыҙыл еләк.

Ни өсөн? Белмәйем. Кешеләр ҙә белмәй.
Тик бер хәҡиҡәтте асыҡ беләм, әсәй —
Ер хаҡына башын һалған кеше генә
Юҡҡа сыҡмай, мәңге беҙҙең менән йәшәй

## Яндырығыҙ мине!

Яндырығыҙ мине — сихырсы ҡыҙҙы,
Дөрләтегеҙ хөкөм усағы яғып!
Тик имандан яҙҙыра алмаҫһығыҙ,
Һеҙгә һис буйһонасағым юҡ!

Белегеҙ, нуры менән йөҙөм һөйгән
Наҙлы ҡояшҡа ғына буйһонғанымды.
Тик бер ҡасан да аңламаҫһығыҙ,
Ниңә
Һеҙҙе кисергәнде, йылмайғанымды.

Ерҙәге бар кәләште көнләштереп
Беҙ үбештек йәйге аяҙ күк менән.
Һәм йондоҙҙар беҙгә йыр арнаны,
Йондоҙ күҙ баҡты һөйөү менән.

Хәҙер сихырсы ҡыҙҙы — мине яндырығыҙ,
Йәшен уғы булып күккә атылырмын!
Һеҙҙе тамуғығыҙҙа ҡалдырырмын да,
Ә күкте үҙем менән алып китермен!







